

# Ҡанатлы көҙ моңо

**Шиғри юлдарҙың авторын билдәләгеҙ**

***Әҙәби викторина***



**Борма-борма юлдар ята –**
**көҙҙөң оҙон юлдары.**
**Тарта, тарта тыуған яғым, -**
**Юҡ йәнемден тынғаны.**

***Мостай Кәрим***

***Муса Ғәли***

***Сафуан Әлибаев***

***Нәжип Асанбаев***



**Көҙгө Дим өҫтөнә ҡарап торам.**
**Тымыҡ йылға аға, аға, аға...**
**Ваҡ тулҡындар, тере секундтарҙай,**
**Уҙа, ярҙы ҡаға, ҡаға, ҡаға.**

***Тамара Ғәниева***

***Мостай Кәрим***

***Әлфинур Вахитова***

***Хисмәт Юлдашев***



**Ниндәй көҙ был?**
**Әйтерһең дә, июнь**
**Күк күкрәтеп, йәшнәп үтмәгән.**
**Уралымдан, гүйә ҡыр ҡаҙҙары**
**Йәй йылыһын алып китмәгән.**

*Салауат Әбүзәр*

*Рәми Ғарипов*

*Раиил Бикбаев*

*Шәриф Биҡҡол*



Көҙ – еткән ҡыҙ.
Көн-төн бирнә сигә...
Айырылғыһы килмәй
Көҙөнән,
Бик йыш кына
Йәше тамып ҡуя
Йыһан әсәһенең күҙенән.

*Салауат Әбүзәр*

*Гөлфиә Юнысова*

*Булат Рафиҡов*

*Муса Ғәли*



**Эй шыҡһыҙ көҙ көнө**
**Ҡалала өй эсе.**
**Йылынып алырға**
**Юҡ ауыл мейесе.**

***Әнисә Таһирова***

***Кәүсәриә Шафиҡова***

***Тамара Искәндәриә***

***Зөлфиә Ханнанова***



Көҙ килгәнен урман һанға һуҡмай -
Йәшеллеккә тора төрөнөп.
Сикәләргә төшкән сал шикелле,
Һары япраҡ ҡала күренеп.

*Шәриф Биҡҡол*

*Мәхмүт Һибәт*

*Гөлфиә Юнысова*

*Гөлнур Яҡупова*



**Яйлап һүнә, үләме ни был көҙ,**
**Сағыу биҙәктәре юйылды.**
**Миңә бөгөн йөҙө уның төҫһөҙ,**
**Йәне көсһөҙ кеүек тойолдо.**

***Риф Мифтахов***

***Дамир Шәрәфетдинов***

***Ғәлимов Сәләм***

***Мәхмүт Һибәт***



**Туҡтап тор, көҙ!**
**Мине ҡаршыларға**
**Ашыҡмаһын әле ҡар-ҡышым.**
**Минең әле йырлы һуҡмаҡтарҙан**
**Офоҡтарға табан барышым.**

***Тамара Ғәниева***

***Кәтибә Кинйәбулатова***

***Динә Талхина***

***Әнисә Таһирова***



Көҙгө төн. Ҡараңғы...Күк йөҙөн
Шыуғалаҡ болоттар япҡандар.
Електе ебетеп ел иҫә,
Ауылдар йоҡларға ятҡандар.

*Рәшит Назаров*

*Мөнир Ҡунафин*

*Шәйехзада Бабич*

*Хәсән Назар*



**Көҙ, һин улай моңһоу түгелһең дә...**
**Миңә ҡалһа, һин йәйҙән йәмле.**
**Һоҡланһам да һинең матурлыҡҡа,**
**Егәрлеккә һинең, тапҡырлыҡҡа,**
**Нимәңдер йәл, ниҙер өйкәй йәнде.**

***Муса Ғәли***

***Хисмәтулла Юлдашев***

***Рәшит Назаров***

***Риф Тойғон***



**Ялҡау ғына һибелә һары япраҡ,**
**Һарҡып ҡына һыҡтай күҙ күге:**
**Остоҡ тамсы – күктә фәйрүзәләр –**
**Көйәҙ көндөң затлы йөҙөгө.**

***Әнисә Таһирова***

***Тамара Ғәниева***

***Кәтибә Кинйәбулатова***

***Тамара Искәндәриә***


Катнашыуығыҙ өсөн рәхмәт!